*Рауил НИҒМӘТУЛЛИН,*
*Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы*

# БУЛҺЫН ӨСӨН БАШҠОРТОСТАН

Башҡортостандың дәрәжәле, ҡеүәтле булыуы башҡорт балаларының һәләтле, булдыҡлы, ысын башҡорт булып үҫеүенә бәйләнгән. Башҡорт балаһы үҙ халҡының тарихын, рухи традицияларын, арҙаҡлы шәхестәре яҙмышын ғаиләлә, балалар баҡсаһында, мәктәптә, үҙ телендә, үҙ халҡының әҙәбиәте, тарихы аша өйрәнһә генә ысын башҡорт булып үҫә ала. Шуға күрә лә Башҡортостан Республикаһы Конституцияһында, халыҡ мәғарифы тураһында законда һәр милләт балаһының үҙ туған телендә белем алырға хоҡуҡлы булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Был хоҡуҡ иң тәүҙә республикабыҙға исем биргән халыҡ балаларына ҡағыла. Әле Башҡортостандағы башҡорт балаларының 38 проценты ғына үҙ туған телендә уҡый. Һуңғы йылдарҙа ҡалаларҙағы башҡорт балаларының бер өлөшө үҙ туған телен сит тел кимәлендә үҙләштерә башланы. Башҡорт балаларының 40 проценты һаман да урыҫ мәктәптәрендә белем ала. Ырымбур, Силәбе, Пермь, Һамар өлкәләрендәге башҡорт балалалары тотош русса уҡый.

Һуңғы йылдарҙа башҡорт балаларын ошо һәләкәттән ҡотҡарыу буйынса алып барған эштәр Стәрлетамаҡ ҡалаһында ла күҙгә күренә башланы. Башҡорт балалар баҡсаһы, башҡорт гимназияһы, башҡорт-төрөк лицейы, айырым мәктәптәрҙә башҡорт синыфтары барлыҡҡа килде.

Ҡалала мәктәп йәшендәге 4857 башҡорт балаһы иҫәпләнә. Шуларҙың 2684-е башҡорт телен аҙнаһына 5 сәғәтлек программа менән үҙләштерә. Улар башҡорт әҙәбиәтен, башҡорт тарихын, Башҡортостан географияһын һ.б. фәндәрҙе башҡорт телендә өйрәнмәй. Ҡалған башҡорт балалары башҡорт телен аҙнаһына икешәр сәғәт өйрәнә. Бары башҡорт гимназияһындағы 477, башҡорт интернат-лицейындағы 232 бала ғына башҡорт телен, башҡорт әҙәбиәтен һәм тағы бер ике предметты башҡортса өйрәнә.

Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы башҡорт балалары һанын ҡала картаһындағы мәктәп райондарына бүлеп иҫәпләһәң, ҡаланың ете төбәгендә ете башҡорт мәктәбе асыу мөмкинлеге асыҡлана. Башҡорт балалары башҡорт директор, башҡорт уҡытыусылары етәкселегендә, үҙ телендә белем алып, үҙ милли мәктәбенең уҡытыу планын, программаларын, дәреслектәрен, халҡының әҙәбиәтен, музыкаһын, сәнғәтен файҙаланып, үҙ милләтенең, халҡының лайыҡлы граждандары булып үҫергә тейеш. Әлбиттә, был эш ҡалалағы мәғариф эшен ойоштороусыларҙың рухи, граждандыҡ позицияһына бәйле.

Был ҡоролтайҙа Башҡортостандың көньяғындағы ҡалаларҙан, райондарҙан башҡорт ҡоролтайҙары башҡарма комитеттары етәкселәре, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары, ҡала хакимиәте башлығы Спартак Ғәли улы Әхмәтов һәм уның урынбаҫарҙары ҡатнаша. Стәрлетамаҡтағы һәм башҡа ҡалаларҙағы башҡорт балаларын башҡортса уҡытыу ихтыяжы — республикабыҙ ихтыяжы, уның мәртәбәһен күтәреү ихтыяжы икәнлеген бөтәгеҙ ҙә яҡшы аңлайһығыҙ! Бында ҡалаларҙағы яңы башҡорт мәктәптәре, гимназиялары өр-яңы программалар, дәреслектәр, әҙәбиәт менән ҡоралланырға тейешлеген яҡшы аңлаусы кешеләр йыйылған. Башҡорт балаларын ғаиләлә, мәктәптә милли рухлы итеп үҫтереүҙе ойоштороу яуаплылығы уларға йөкмәтелгән. Был бурысты тормошҡа ашырыу ҡоролтайҙа ҡатнашыусыларҙың тәүҙә үҙ балаһын башҡортса һөйләшергә өйрәтеүенән, өйөнә башҡорт гәзиттәрен, журналдарын алдырыуынан, китаптарҙы башҡорт телендә уҡыуынан, башҡортса радио һәм телевидение тапшырыуҙарын ҡарауынан, ғаиләһендә милли моң, милли рух булдырыуҙан башлана. Был халҡыбыҙ, республикабыҙ мәртәбәһен күтәреүгә йүнәлтелгән изге эш.

Башҡортостан Урал күкрәгенең
Меңәр йыллыҡ ҡорос ҡалҡаны,
Сыныҡтырған уны халҡыбыҙҙың
Ирек өсөн түккән ал ҡаны.
Башҡортостан — минең йәнтөйәгем!
Башҡортостан — минең ырыҫым!
Башҡортостан йәмен, ҡотон һаҡлау
Һинең, минең,
Һеҙҙең, беҙҙең уртаҡ бурыс ул!